*Саралар*

# Һуғыш балалары — тарих яралары

Зөлфиә ЗАҺИТОВА

Район китапханаһында һуғыш балаларына хөрмәт күрһәтеү йөһәтенән «Һуғыш балалары — тарих яралары» исемле әҙәби-музыкаль кисә булып үтте. Уны ойоштороусы китапханасылар Лилиә Дәүләткирәева һәм Алһыу Хоҙайбирғәнова кисәгә бала сактары ҡанлы һуғыш йылдарына тура килгән оло быуын вәкилдәрен, тыл ветерандарын саҡырған.

Бала һәм һуғыш һүҙҙәрен йәнәш ҡуйыу ауыр булһа ла, әсе яҙмышҡа һуғыш осоро балалары ла дусар ителә.

Һуғыш беҙҙе ҡолаҡтарҙан
тартып,
Ваҡытынан иртә өлгөрттө.
Кистән бала итеп йоҡлатты ла,
Таң атыуға инде ир итте, —

тип яҙған шағир Әнғәм Атнабаев.

1941 йылдың 1 сентябрендә мәктәпкә барыу урынына 10-12 йәшлек бала-саға йәшниктәргә баҫып, станок артына баҫырға һәм тәүлегенә 12 сәғәт эшләргә мәжбүр була. 11-15 йәштәрҙә улар тулы хоҡуҡлы эшселәр булып һуғыш ҡоралдары етештерә, баҫыуҙа эшләй, урман ҡырҡа, госпиталдә яралыларҙы ҡараша. Ул быуын кешеләре эш һөйөп, хеҙмәттә сыныҡып, үҙҙәренә-үҙҙәре тормошта юл ярып, ниндәй ҙә булһа һөнәргә эйә булып, илебеҙҙең төрлө мөйөштәрендә донъя ҡороп, күп бала бағып йәшәгән. Үткән тормоштарына һис үкенмәй улар, ғорурланып һөйләй, йәшәү дәртен, тормошҡа һөйөүҙе, яҡты киләсәккә ышанысты, өмөттө юғалтмаған, күңелдәре ҡатмаған.



Сараға саҡырылған район ветерандар советы рәйесе А. Ғ. Төлкәбаев, КПРФ-тың Әбйәлил районы буйынса беренсе секретары М. Ә. Бикмәтов тәьҫораттары менән уртаҡлашты.

— Һуғышта еңеп тә, иң аҙ эш хаҡы һәм пенсия алабыҙ. Еңелгән Германия беҙҙән күпкә етеш йәшәй. Тормошобоҙ түҙерлек, әммә шундай ҙур майҙан билегән Рәсәй яҡшы йәшәй алыр ине. Пенсия йәшен арттырыу ҙа йөнлегә түгел. Күптән түгел һуғыш балаларына миҙалдар тараттыҡ, киләһе йыл еңеүҙең 75 йыллығына һуғыш балалары «Үлемһеҙ полк»та ҡатнашайыҡ һәм уға хәҙерҙән әҙерлекте башларға кәрәк, — тигән тәҡдим индерҙе Мират Әхмәт улы.

Сарала ҡатнашыусылар тәҡдимде дәррәү күтәреп алды һәм һуғыш балалары советы ойоштороп, Радик Мостафинды етәксеһе, Сөйөмбикә Әғзәмова һәм Зәйтүнә Хәкимованы урынбаҫарҙар итеп бер тауыштан һайланы.

— Һуғыштан алда Айғырбатҡан утарында мал үрсетеү базаһы төҙөлдө. Унда минең атайым Абдулла Сиразетдинов мөдир булды. Утарҙа бер нисә землянка, кәнсә һәм мөдир йәшәгән бер генә ағас өй, йылҡы, үгеҙ, һыйыр, кәзә, һарыҡ һарайҙары булды. Атайым һуғышҡа алынғанда, миңә 4 йәштәр тирәһе булғандыр. Уның ҡушыуы буйынса, беҙ әсәйем менән базанан күҙ яҙҙыҡтырманыҡ, ни тиһәң дә, һөт-ҡатыҡһыҙ торманыҡ. Кәзә-һарыҡтар эре, ҙур мөгөҙлө инеләр. Ҡатындар уларҙың йөн-дебетен ҡырҡып, заготконторағa тапшырҙы, ә малдарҙың ситенгә ышҡынғанда йәбешеп ҡалғанын беҙ бала-саға йыйып бирәбеҙ, әсәйҙәр фронтҡа ойоҡ-бейәләй бәйләне. Ҡыйлыҡтан иҫке һөйәк йыйҙыҡ, әсәйем һабын ҡайнатып, ҡатындарға бүлеп бирер ине. Ул һабын йөн йыуыуға, башҡа көнкүреш кәрәк-ярағына ярап һалды. Әсәйем шәп булды, йыл һайын картуф, һуған, кишер, шалҡан сәсер ине. Һуғыш бөтөү менән малдарҙы йәһәт кенә вагондарға тейәп, ҡайҙан алып килгәндәр шунда оҙаттылар. Еңеү көнөн, атайымдың һуғыштан ҡайтҡанын иҫләмәйем, — тип һөйләне мәғариф ветераны Сөйөмбикә Әғзәмова ул дәүер михнәттәрен тулҡынланып.

Әҙәби-музыкаль кисәне Мәрүә Ҡужахмәтова, «Ыныйы» ансамбле матур йырҙары, китапхана ветераны Маргарита Ғималетдинова Эдуард Асадовтың «Һуғыштан хат» исемле тулҡынландырғыс шиғыры менән йәмләне.

Оскон. - 2019. - 28 май.